# Ирек Кинйәбулатов ижадында тыуған ер темаһы

Кейекбаев уҡыуҙары
Стәрлетамаҡ ҡалаһы. 2013 йыл, ноябрь



Ҡырмыҫҡалы районы
Бишауыл – Уңғар мәктәбенең
7 класы уҡыусыһы
Алия Мөьминова

# Йөкмәткеһе

- Инеш һүҙ
- Шағир Ирек Кинйәбулатов хаҡында ҡыҫҡаса белешмә
- Ирек Кинйәбулатовтың тыуған ауыл хаҡындағы шиғырҙары
- Ирек Кинйәбулатовтың Ҡырмыҫҡалы районына бағышланған шиғырҙары
- Ирек Кинйәбулатовтың Башҡортостанға арналған шиғырҙары
- Йомғаҡлау
- Ҡушымта






Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты

- Ирек Кинйәбулатов- шағир яҡташыбыҙ, беҙҙең мәктәбебеҙҙең дә ул йыш ҡына хөрмәтле ҡунағы. Шуға күрә ижады миңә яҡын

-Шағир ижадында Тыуған ер темаһы төп урындарҙың береһен биләй. Шағир ижады аша тыуған еремә үҙенсәлекле бер ҡараш ташларға теләйем

- Тикшеренеү эшенең нескәлектәренә төшөнөргә ынтылыш миңә көс, дәрт бирҙе

Эш барышында  шағир ижадына ҡағылышлы Тимерғәле Килмөхәмәтовтың “Замана йырсыһы” (“Әҙәбиәттең сағыу биҙәктәре” йыйынтығы, Өфө, 2005 йыл), “Тормошсан шиғриәт” (“Замана тауышы” китабына баш һүҙ, Өфө, 2008 йыл), Рим Исхаҡовтың “Шағирҙың ижад артылыштары” (“Ағиҙел” журналы,  2010 йыл, 7-се һан), “Мин бит кеше түгел кешеһеҙ” (“Даирә” гәзите, 13 июль, 2013 йыл), Фәнзил Санъяровтың “Мин бит һеҙһеҙ бер кем түгел ерҙә…” (“Башҡортостан уҡытыусыһы” журналы, 2013 йыл, 7-се һан) мәҡәләләрен өйрәндем.

Фәнни эштең материалына миҫалдар “Замана тауышы” китабынан (Өфө, 2008 йыл) алынды.

## Ирек Кинйәбулатов –

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мәжит Ғафури, Зәйнәб Биишева, Фәтих Кәрим, Рәми Ғарипов, Сергей Чекмарев исемендәге әҙәби, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре

## Шағирҙың китаптары –

“Баҫыу юлы”, “Сыйырсыҡтар бала осора”, “Һөйөү иртәһе”, “Мин - башҡорт”, “Арғымаҡта”, “Замана тауышы”, “Ғүмер китабы”

# Ирек Кинйәбулатовтың тыуған ауыл хаҡындағы шиғырҙары

Ирек Кинйәбулатовтың шиғырҙарының күбеһе тыуған ергә, уның эшһөйәр кешеләренә бағышланған. Шул шиғырҙарҙа шағирҙың лирик геройының тыуған еренә һөйөү тойғолары

сағылыш таба.

Тыуған ерем - батыр сәңгелдәге,
Тыуған ерем – батыр төйәге.
Ҡайҙа ғына, ҡай тупраҡта ятмай
Аҫыл яҡташтарҙың һөйәге

# Ирек Кинйәбулатовтың Ҡырмыҫҡалы районына бағышланған шиғырҙары

Шағирҙың Ҡырмыҫҡалы районына бағышланған байтаҡ шиғырҙары бар. Уларҙа шағир тыуған ер төшөнсәһенә

байтаҡ юғарылыҡтан ҡараш ташлай. Яҡташтар төшөнсәһе лә киңерәк планда яңғыраш ала. Нәҡ ана шул яҡташтарҙың төрлө өлкәләрҙә хеҙмәте тотош ил

хеҙмәтенә үрелеп, Ватаныбыҙҙы тағы үҫтерә, байыта, ҡеүәтләндерә

# Ирек Кинйәбулатовтың Башҡортостанға арналған шиғырҙары

Беҙҙең һәр кемебеҙ өсөн Башҡортостаныбыҙ- тыуған ер. Һәр кемебеҙ өсөн изге ул. Ирек Кинйәбулатовтың Башҡортостан хаҡындағы

шиғырҙары уҡыусыла Ватанға һөйөү рухы, уның менән ғорурланыу хисе тәрбиәләй, кешене дуҫлыҡҡа, татыулыҡҡа, берҙәмлеккә саҡыра

Бәхет, шатлыҡ, хаҡлыҡ төйәгендәй,

Балҡый минең Башҡортостаным!

## Йомғаҡлау

Ирек Кинйәбулатов ижадында тыуған ер темаһы айырым бер урын алып тора. Тыуған ер тыуған ауыл, тыуған район менән һынланып, тотош Башҡортостанға барып тоташа. Ә инде Башҡортостан аша тыуған ер төшөнсәһе мәғрүр Рәсәй менән бәйләнә. Шул рәүешле, тыуған ерҙең дөйөм образы

күҙ алдына баҫа.